МАУК «Чишминская районная межпоселенческая библиотека»

# Садыков Габит Гатович

(1923 - 2011)

## 100 лет со дня рождения

**ПИСАТЕЛЬ, МАСТЕР АФОРИЗМОВ, ЧЛЕН СОЮЗА ПИСАТЕЛЕЙ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ И РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН, БЫВШИЙ СТАРШИЙ НАУЧНЫЙ СОТРУДНИК ОТДЕЛА ПАТЕНТОВ И ЛИЦЕНЗИЙ УФИМСКОГО НАУЧНО-ИССЛЕДОВАТЕЛЬСКОГО ИНСТИТУТА ГЛАЗНЫХ БОЛЕЗНЕЙ АКАДЕМИИ НАУК РБ, ЗАСЛУЖЕННЫЙ ИЗОБРЕТАТЕЛЬ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН, КАВАЛЕР ОРДЕНОВ ОТЕЧЕСТВЕННОЙ ВОЙНЫ И КРАСНОЙ ЗВЕЗДЫ**

# Поэт и изобретатель

**ИНФОРМАЦИОННАЯ СПРАВКА**



***Вниманию читателей!***

**Габит Гатович Садыков *родился в д. Средне-Хозятово Чишминского района Башкортостана. Окончив Уральский политехнический институт, работал сотрудником в отделе патентов и лицензий Уфимского научно-исследовательского института глазных болезней.***

***В литературе с 90-х годов. Работал в малых жанрах поэзии. Книги “Невысказанные поговорки” (1992), “Источник мудрости” (1996), “Янтарные четки” (2006) состоят из афоризмов и крылатых выражений. Для его творчества характерны народная мудрость, емкость мыслей, тонкий юмор и образность.***

***Накануне 100 - летия со дня рождения Габита Гатовича, предлагаем ознакомиться с биографией, жизнью и творчеством этой интересной, талантливой личности на страницах библиографического пособия - информационной справки “Поэт и изобретатель”.***

**Поэт и изобретатель:[Габит Гатович Садыков]:** *Информационная справка к 100 летию со дня рождения Габита Гатовича на башкирском и русском языках/Составитель Р.Ф. Гареева. - МАУК “Чишминская районная межпоселенческая библиотека, Информационно-библиографический отдел, 2023.- 20 с., илл., фото.*

# Күренекле фекер эйәһе

# Ғәбит Садиҡов

## һөнәре буйынса - инженер

## Уға “СССР-ҙың почетлы уйлап табыусыһы”, “Башҡортостандың атҡаҙанған уйлап табыусыһы” исемдәре бирелә

# АҠЫЛ ЭЙӘҺЕ

*/Башҡортостан гәзите//Әҙәбиәт. Аҡыл эйәһе: [Ғәбит Садиҡов тураһында], 29.10.2013*



**Ғәбит Садиҡовтың** тәүге афоризмдары бынан ҡырҡ йыл самаһы элек "Һәнәк" журналында донъя күргәйне. Ул Салауатта йәшәй ине, ҡаты тышлы ҡалын дәфтәргә тупланған яҙмаларын редакцияға шунан ебәргәйне. "Әйтелмәгән әйтемдәр" тигән исем ҡушып, уларҙы матбуғатҡа мин әҙерләп бирҙем. Был һүҙ бәйләме сәйерерәк яңғырай һымаҡ, ысынлап та, ниңә "әйтелмәгән әйтемдәр", әйтелмәгәс, әйтем буламы ни ул тигән һорау тыуа. Мин уларҙың бығаса әйтелмәгән әйтемдәр булыуын күҙ уңында тотҡайным ул саҡта. Һуңынан Ғәбит ағай ошо исемдәге китабын да сығарҙы. Эйе, бығаса бер кем дә әйтмәгән, тормош тәжрибәһенә таянып, берәмтекләп йыйылған, кескәй генә күләменә ҙур фекер һыйҙырған әйтемдәр тупланғайны унда.

Тәүге әйтемдәр шәлкеменән һуң "Һәнәк"тең һәр һанында ул үҙенең фәһемле, үткер телле, тәрән мәғәнәле һәм шул уҡ ваҡытта үтә кескәй күләмле, йәғни бер генә һөйләмдән ғибәрәт афористик яҙмалары менән уҡыусыларҙы берсә һоҡландырып, берсә ҡыуандырып торҙо. Асылда был яҙмаларының һәр береһе тотош әҫәрҙә әйтелгән фекерҙәрҙе алыштыра алырлыҡ. Быуаттар буйы тупланған мәҡәл-әйтемдәр диңгеҙенә аҡыл тамсыларынан йыйылған йылғалай ҡойҙо уның ижады, был хикмәтле диңгеҙҙе байытты һәм мулыраҡ итте.

Академик Ғайса Хөсәйенов та уның тап ошо сифатына иғтибар иткәйне: "Бигерәк тә ҙур тормош юлы үткән, оло тәжрибә туплаған, бай аҡыл йыйған Ғәбит Садиҡов үҙен халыҡ һүҙ оҫталары рухында заманыбыҙҙың бер сәсән телле шәхесе, афористик жанр оstаһы итеп танытты. Уның афоризмдары мәҡәл, әйтем, һынамыш, ҡанатлы һүҙҙәр рәүешендәге жанр шәлкемдәре менән айырылып тора. Ижад емештәренә тапҡыр аҡыллылыҡ менән бергә тәртмә теллелек, шаянлыҡ-шуҡлыҡ, пародоксаллек кеүек сифаттар ҙа бик хас. Заманыбыҙҙың Ғәбит сәсәне афоризм жанрына тулы мәғәнәһендә ижади граждандлыҡ, ҡабатланмаçлыҡ юғарылығын бирә".

Эйе, заманында Ғәбит Садиҡовтың фәлсәфәүи ынйыларҙан торған үҙенсәлекле ижады хаҡында байтаҡ арҙаҡлы шәхестәр, ғалимдар, яҙыусылар һоҡланыу тойғоһо менән матбуғатта яҙып сыҡты. Әйтәйек, ғалим, ауыҙ-тел ижады белгесе, филолог

Розалия Солтангәрәева Ғәбит сәсәндең “Гәүһәр тиҫбе” тип исемләнгән китабының әһәмиәте лә, ҡиммәте лә бик ҙур булыуын билдәләй. “Һүҙ сәнғәтенә, фекерләү ҡеүәтенә өлгө булырҙай ҡойоп ҡуйылған ҡанатлы уйлы, тура һүҙле әйтемдәр китаптың бәsен, ҡиммәтен күтәрә”, – ти ул. Унан быны дәлилләү өсөн миsалдар килтерә: “Һине күрә алмағанды ла күрә бел”, “Алтын туйға барып етеү өсөн ҡорос сыҙамлыҡ кәрәк”, “Һынған сыҙамлыҡтан тимер күsәк сыға”... “Һүҙ – сәпкә атҡан уҡтай төҙ, сәғәттәй самалы, нөктәләй теүәл, сәскәләй хуш булғанда, аң яңыртырлыҡ дәрәжә ала". “Гәүһәр тиҫбе”лә мәгәр быңдай миҫалдар бик күп: “Ергә тиклем бөгөлөп күккә күтәрелеүселәр бар”, “Етәкселәр етерлек, етәкләүселәр аҙ”, “Үҙен генә ҡәҙерләгән кеше үҙ ҡәҙерен үҙе ебәрә”. Был йәһәттән Ғәбит Садиҡовтың китабы шағирҙарға ла, яҙыусыларға ла һүҙ, кәлимә, лаҡап өлгөләре менән бик кәрәкле үҙенсәлекле дәреслек тә була ала. “Гәүһәр тиҫбе”нең йәнә бер кәрәклегенең һәм ҡиммәтлелегенең дәлиле – һирәк осрай торған һүҙҙәрҙең китапта бик ҙур урын алыуы. Бер яҡтан улар башҡорт һүҙ, телмәр байлығына мәртәбә булһа, икенсе яҡтан фекер тослоғон, иң-иң булған хис-тойғоно, уйҙы тәрәнерәк әйтеп бирә алыу өсөн ифрат оло табыш (йәнә филология, шиғриәт мәктәбенә әсбап), тағы ла башҡорт һүҙен асыуға ҡулланма була ала”, – ти ғалимә.

Отҡор һүҙлелек, сәсәнлек һәләте Ғәбит Садиҡовҡа әсәһенән күскән. Дим буйындағы Ябалаҡлы ауылынан Урта Хәжәткә килен булып төшкән әсәһе Хәбибъямал йор, кинәйә һүҙле ҡатын була. Ғәбит ағайҙың хәтерләүенсә, һөйләшкәндә уның ауыҙынан фәһемле әйтемдәр, ҡобайыр-таҡмаҡтарҙан өҙөктәр сылтыр шишмәләй аға торған булған. Һәм, әлбиттә, зирәк аҡыллы кескәй Ғәбит күңеленә улар һеңә барған. Шулай итеп, ул бәләкәй саҡтан уҡ туған телдең матурлығына, кешенең эске һәм тышҡы донъяһын бер-ике һүҙ менән әйтеп биреү ҡеүәһенә, телдең үтә нескә байлығына, моңсоллоғона һоҡланып бөтә алмай. Уҡығанда математиканан бөтә мәсьәләләрҙе иң тәүҙә сисеүсе һәләтле егет була. Уға “йоҡҡан” әсәһендәге һәләт тә тиҙҙән үҙен һиҙҙерә башлай. Һуғышҡа тиклем Өфөлә уҡығанда “Йәш төҙөүсе” гәзите биттәрендә балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре күренгеләй башлай. Тора-бара, ишеткән-уҡыған тапҡыр, фәһемле һүҙҙәр менән бергә, үҙ күңеленә килгән төрлө һынамыштарҙы, мәҡәл-әйтемдәргә тартым фекерҙәрҙе ҡуйын дәфтәренә теркәп барыу рухи ихтыяжына әүерелә уның...

### *Ижады ғына түгел, тормош һәм хеҙмәт юлы ла һоҡланғыс Ғәбит ағайҙың:*

1942 йылдың февралендә техникумдың дүртенсе курсында уҡыған еренән үҙ теләге менән фронтҡа китә ул. Өфөлә ойошторолған 214-се уҡсылар дивизияһы составында Украинаны, Молдавияны, Румынияны, Венгрияны дошмандан азат итеүҙә ҡатнаша, бер нисә ҡат яралана, контузия ала. “Ҡыҙыл Йондоҙ”, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары, “Батырлыҡ өсөн” һәм башҡа миҙалдар менән бүләкләнә.

Һуғыштан һуң Салауат ҡалаһында “Башкирэнерго” берекмәһенә ҡараған йылылыҡ селтәрҙәренә етәкселек итә. “Салауатнефтехимремстрой” тресының етештереү-техник бүлеге башлығы булараҡ, төҙөлөш һәм төҙәтеү эштәрен механикалаштырыу буйынса бик күп технологик яңылыҡтар индерә.

Өфөгә күсеп, “Башнефтехимремстрой” тресы идаралығында баш технолог ярҙамсыһы вазифаһына тәғәйенләнгәс, уға “СССР-ҙың почетлы уйлап табыусыһы” билдәһе, һуңыраҡ “Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уйлап табыусыһы” тигән маҡтаулы исемдәр бирелә. Ғәбит Садиҡов 150-нән ашыу патентҡа эйә ине! Шуларҙың бер нисәһе медицина өлкәһендәге асыштар өсөн бирелгән. Ә ни өсөн медицина өлкәһендә? Хикмәт шунда: Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты директоры, академик Марат Аҙнабаев саҡырыуы буйынса ул бер нисә йыл ошо институтта эшләне. Һәм үҙенең аҡыл талап иткән һөнәрҙәр оҫтаһы, ысын ижадсы икәнлеген бында ла күрһәтте.

Билдәле булыуынса, беҙҙең республикала балаларҙың күҙен дауалау, яңы тыуған һуҡыр сабыйҙарға операция яһау өлкәһендә илдә, хатта донъяла беренсе ҡыйыу аҙымдар яһалды. Әммә быны тормошҡа ашырыу өсөн әллә күпме яңы операция ҡорамалдары, яңы техник йыйланмалар һәм ысулдар уйлап табырға тура килә. Бына ошонда фән һәм техника үҫешенең, уйлап табыусы һәм ғалимдың ижади дуҫлығының, тиҫтәләгән оҫтаның эш һөҙөмтәләре күренә лә инде. Был, берҙән, дауалау өлкәһендә яңы асыш булһа, икенсенән, Ғәбит Садиҡовтың аҡыл ҡөҙрәте менән пәйҙә булған ҡорамалдар иң ҡатмарлы операцияларҙы күпкә тиҙерәк һәм сифатлыраҡ яһарға ярҙам итә. Оҙаҡламай уларҙы Ҡазандағы махсус заводта күпләп сығарып, бөтә Рәсәй дауаханаларында файҙалана башлайҙар...

Шулай ҙа, Ғәбит Садиҡов халыҡҡа иң беренсе сиратта йор телле сәсән, афоризмдар оҫтаһы булараҡ билдәле. Был жанрға, ғөмүмән, үҙенең ижадына ҡарата мөнәсәбәтен бына нисек белдергәйне ул заманында: “Афористик жанр – теге йәки был халыҡтың рухи, әхлаҡи, сәйәси, фәнни, ижтимағи йөҙөн, тел байлығын, фекер тәрәнлеген сағылдырыусы фәлсәфәүи критерий ул. Шулай икән, минең уйымса, һәр яҙыусы, филология белгесе ошо тарафҡа үҙ өлөшөн индерергә бурыслы. Был үткәндә-һүткәндә генә эшләнә торған нәмә түгел, ул төплө, оҙайлы һәм етди аҡыл көсөргәнеше талап итә... Тарихтан төшөп уның кешелек йәмғиәтендә лайыҡ урын биләүен исбат итеү, башҡорт афористикаһын юғарыраҡ кимәлгә күтәреү ниәтендә мин ҡырҡ йылдан ашыу ошо жанрға мөкиббән бирелеп, эшләп киләм. Энә осондай алтын бөртөгөн табыу өсөн тау-тау ҡом йыуырға тура килә. Хәҙерге көндәргә тиклем сыҡҡан әйтем йыйынтыҡтарында һуңғы быуаттарҙағы илебеҙҙәге ижтимағи-тарихи, фәнни, мәҙәни үҙгәрештәр сағылыш тапманы тиерлек. Ә бит был ҡатмарлы осорҙа халҡыбыҙ күп йәһәттән етди үҙгәрештәр кисерҙе һәм әле

лә кисерә. Тәбиғи, был үҙгәрештәр, башҡа әҙәби жанрҙарҙағы кеүек үк, афористикала ла сағылыш табырға тейеш.

Бына ошо хәҡиҡәтте күҙ уңында тотоп, шөһрәт ҡаҙаныу өсөн түгел, ә халҡымдың алтын ҡумтаһына бер аҙ ҡушымта булһын тигән уй менән, заманыбыҙ үҙе ҡолаҡҡа шыбырлаған, зиһенде тибрәткән афористик берәмектәремде – аманатымды уҡыусыларға, беренсе нәүбәттә йәштәргә, тәҡдим итәм. Тормош мәҙрәсәгеҙҙә был “Гәүһәр тиҫбе”не ҡулығыҙҙан төшөрмәй, мунсаҡтарын даими шымартырһығыҙ тигән өмөттә ҡалам”.

***Бына шундай изге ниәт менән йәшәне, ижад итте Ғәбит ағай. Изге күңелле кеше генә булдыра ала быны. Үҙенсәлекле ижады менән генә түгел, кешелеклелеге, тыйнаҡлығы, ябайлығы, ярҙамсыллығы, асыҡлығы менән дә башҡа әҙиптәрҙән айырылып тора ине Ғәбит сәсән. Хәйер, талантлы кеше тап бына шулай булырға тейештер ҙә!***

## ӘЙТЕЛМӘГӘН ӘЙТЕМДӘР

- Ағас өсөн иң әсе яҙмыш – балта һабы булыу.
- Аҡ нәмәнең дә күләгәһе ҡара була.
- Ал бирмәү өсөн ял белмәү лазым.
- Аҡыл менән эш итһәң, аҡланырға тура килмәҫ.
- Төп эште “… һәм башҡалар” башҡара.
- Иң татлы емеш – хеҙмәт емеше.
- Йөҙөп эшлә, өҙөп тешлә.
- Эштән ҡото осҡан ҡотаймаs.
- Сәскәндә – сәғәте, урғанда минуты ҡәҙерле.
- Түрәнең теше һыҙлағанда ялағай ыңғыраша.
- Ҡырын ҡараһаң, ҡырын күрәһең.
- Ағым ыңғайына йөҙөүселәр йышыраҡ бата.
- Ваҡытты бушҡа уҙғарыу ҡиммәткә төшә.
- Елкәһе йоҡаның кеsәһе йоҡа.
- Бөгөнгө көн менән йәшәү бөлгөнлөккә төшөрә.
- Ҡуш ҡуллап алғанды һыңар ҡул менән ҡайтарма.
- Һөйөү иsертә, өйләнеү айныта.
- Баш эйгән өндәү билдәһе һорау билдәһенә әүерелә.
- Күршеңде күргең килмәһә, үтескә аҡса бир.
- Телен тешләгәндең башы тишелмәй.
- Емешһеҙ ағас күләгәһе менән маҡтаныр.
- Алтын һүҙ артыҡ булмай.

**25 октября - 100 лет** со дня рождения ***Садыкова Габита Гатовича,*** писателя, мастера афоризмов, члена Союза писателей РФ и РБ, бывшего старшего научного сотрудника отдела патентов и лицензий Уфимского научно-исследовательского института глазных болезней Академии наук РБ, заслуженного изобретателя РБ, кавалера орденов Отечественной войны и Красной Звезды (1923- 2011)



## САДЫКОВ ГАБИТ ГАТОВИЧ

*/ www.bashinform.ru/*

Родился 25 октября 1923 года в ***деревне Среднехозятово*** Чишминского района Башкирской АССР. После окончания семилетней школы поступил в Башкирский коммунально-строительный техникум в Уфе.

В 1942 году он ушел на фронт, принимал участие в тяжелых боях с фашистскими захватчиками, был ранен. За проявленную храбрость награжден орденами Отечественной войны и Красной Звезды, медалями.

В 1945 году он поступил в Тульское танково-техническое училище. До 1947 года служил в рядах Советской Армии. Позже, в 1994 году, как активный участник Великой Отечественный войны, получивший ранение в боях, Габит Гатович был награжден медалью «За отвагу».

После демобилизации ***Габит Садыков*** окончил Уральский политехнический институт, работал конструктором на Карачаровском механическом заводе в Москве, затем инженером в Управлении по эксплуатации бензинопровода Уфа-Челябинск, старшим инженером в тресте «Средазнефтестрой». Вернувшись в Башкортостан, работал на руководящих должностях в тепловых сетях города Салавата, трестах «Салаватнефтехимремстрой» и «Башнефтехимремстрой». До ухода на пенсию трудился старшим научным сотрудником в отделе патентов и лицензий Уфимского научно-исследовательского института глазных болезней Академии наук республики.

***Габит Садыков*** увлеченно занимался изобретательством. Более 50 его изобретений внедрены на производстве. **В 1997 году ему было присвоено почетное звание «Заслуженный изобретатель Республики Башкортостан».**

Еще в школьные годы ***Габит Гатович*** начал интересоваться литературой. До войны в республиканской газете «Молодой строитель» и других изданиях стали появляться его стихи и рассказы. Позже он всерьез увлекся афоризмами и поговорками. Его стихотворные книги «Невысказанные поговорки» (1992),

«Источник мудрости» (1996), «Бриллиантовые четки» (2006) и «Жемчужины мудрости» (2009) полностью состоят из стихотворных афоризмов и крылатых выражений. Каждое из них основано на многовековой мудрости народа, правилах народной педагогики и философских обобщениях. Они привлекают читателей лаконичностью и меткостью.

* * *

Человек – трудами, волк – зубами.

* * *

Золотые руки не заменят позолоченные.

* * *

Воз тащит кобыла, скрипит телега.

* * *

Неполученная зарплата – шкура неубитого медведя.

* * *

Работать не поднимая головы – не признак наличия головы.

* * *

Выдолбил лодку, строгай и весла.

* * *

Начальство и из лозы проблему сплетет.

* * *

Скрипучие полы мастера проклинают.

* * *

Дело не в количестве народа, а в его единстве.

* * *

Спросили у лодыря:
– Что лучше: лежать или есть?
Тот, долго не думая:
– Лучше лежа есть.

* * *

У верхов шире горизонт.

* * *

Прогресс: раньше резину тянул, нынче жует.

* * *

Сон в театре платный.

* * *

Начальства тьма, нет хозяина.

* * *

Народ будильником не разбудишь.

* * *

И спичка имеет голову.

* * *

У каждого шута свой король.

***Творчество Габита Садыкова полностью основано на традициях устного народного творчества.*** Для его стихов характерны народная мудрость, глубинная емкость мыслей, мировоззренческих выводов. Его произведения подкупают тонким юмором, яркой образностью и ритмичностью. На страницах республиканской печати постоянно появлялись его содержательные, поучительные рассказы, юморески и хикметы.

**Габит Гатович плодотворно и напряженно работал до последних дней.**

**Семья:**
Дочери поэта – Лена и Клара, внучка Айгуль.

**Габит Садыков скончался 20 мая 2011 года на 88 - м году жизни.**

## Сведения о Габите Садыкове из учётно-послужной картотеки

*Учётно-послужная картотека офицерского состава*

### Садыков Габит

Фамилия, имя, отчество: **Габит Гатович Садыков**

Дата рождения военнослужащего: **25.10.1923**

Место рождения: **Башкирская АССР, Чишминский р-н, д. Ср. Хозятово**

Воинское звание: **техник-лейтенант**

### Служба

Место призыва: **Чишминский РВК, Башкирская АССР, Чишминский р-н**

Дата начала службы: **07.03.1942**

Части и подразделения:

**147 фр. зсп**

**788 сп**

Дата завершения службы: **25.05.1947 г.**



База патентов СССР

Авторские свидетельства и патенты СССР

Союз Советских Социалистических Республик

Государственный комитет СССР по делам изобретений и открытий

# ОПИСАНИЕ ИЗОБРЕТЕНИЯ К АВТОРСКОМУ СВИДЕТЕЛЬСТВУ

(11) 969880

(61) Дополнительное к авт. свид-ву –

(22) Заявлено 31.03.81 (21) 3272084/29-33

с присоединением заявки № –

(23) Приоритет –

Опубликовано 30.10.82. Бюллетень № 40

Дата опубликования описания 30.10.82

(51) М. Кл.$^3$ E 06 C 1/38

(53) УДК 69.057.68(088.8)

(72) Авторы изобретения Г. Б. Шнейдер, Г. Ф. Шаяхметов, Г. Г. Садыков, Ф. И. Габидуллина, П. В. Курочкин и В. Ф. Евтюхин

(71) Заявитель Специализированный ремонтно-строительный трест "Башнефтехимремстрой"

ВСЕСОЮЗНАЯ ПАТЕНТНО-ТЕХНИЧЕСКАЯ БИБЛИОТЕКА 13 13

## (54) УСТРОЙСТВО ДЛЯ ОБСЛУЖИВАНИЯ ОБЪЕКТОВ НАПЛАВУ ВНУТРИ РЕЗЕРВУАРОВ

1

Изобретение относится к подъемным устройствам и служит для спуска и подъема людей с целью производства работ на объектах, имеющих переменную высоту, в частности внутри резервуаров наплаву.

Известна катучая лестница для спуска и подъема людей на плавающую крышу резервуара, содержащая металлическую ферму, опорные катки, ступени [1].

Недостатком данной лестницы является ее громоздкость, что создает дополнительную нагрузку на плавающий объект.

Наиболее близким к предлагаемому является устройство для обслуживания объектов, содержащее соединенную с объектом лестницу, ступени которой связаны тетивами и закреплены фиксирующими средствами, переходную площадку и ограждение [2].

Недостатком известного устройства является то, что оно может быть использовано только для работы на наземных сооружениях, имеющих постоянную высоту,

2

и она не обеспечивает требуемой безопасности для работы на плавающих объектах резервуаров.

Цель изобретения – расширение эксплуатационных возможностей.

Указанная цель достигается тем, что устройство для обслуживания объектов наплаву внутри резервуаров, содержащее лестницу, ступени которой связаны тетивами и закреплены фиксирующими средствами, переходную площадку и ограждение, снабжено барабанами и противовесом, причем барабаны закреплены на переходной площадке, а противовес соединен с тетивами, а ограждение снабжено направляющими и выполнено в виде жестких четырехугольных рам с кольцами, поперечины которых соединены гибкими связями, при этом рамы смонтированы с помощью блоков на направляющих, пропущенных через кольца, а тетивы пропущены через барабаны, при этом противовес также соединен и с нижними концами направ-

ляющих, верхние концы которых закреплены на переходной площадке.

Фиксирующее средство может быть выполнено в виде зажима, содержащего сухарь и болт.

Кроме того, оно может быть снабжено ориентирующими выпукло-вогнутыми втулками-стопорами, контактирующими выпуклыми поверхностями с рамами.

На фиг. 1 изображено предлагаемое устройство при верхнем положении плавающей крыши; на фиг. 2 – то же, при нижнем положении плавающей крыши; на фиг. 3 – сечение А–А на фиг. 2; на фиг. 4 – предлагаемое устройство, вид сверху; на фиг. 5 – узел I на фиг. 3, на фиг. 6 – узел II на фиг. 3.

Устройство состоит из лестницы, выполненной из двух гибких элементов (тетив) 1, на которых закреплены ступени (перекладины) 2 посредством зажимов 3, содержащих сухарь 4, болт 5. Гибкие элементы (тетива) 1 лестницы одним концом закреплены к плавающей крыше 6 через основание 7 пропущены через барабаны 8 и другим концом через талреи 9 прикреплены к противовесу 10, который от раскачивания удерживается струной 11, закрепленной к кольцу 12 жесткости резервуара 13 и к якорю 14.

Ограждение лестницы содержит жесткие рамы 15, имеющие кольца 16. Жесткие рамы 15 соединены гибкой подвеской 17. Для складывания гибких подвесок 17 с наружной стороны ограждения, к жестким рамам 15 прикреплены ориентирующие втулки 18 вогнутостью наружу. Рамы 15 на гибких подвесах 17 фиксируются болтами 19. Гибкие подвески прикреплены к переходной площадке 20.

Рамы 15 ограждения посредством колец 16 перемещаются по направляющим струнам 21, прикрепленным одним концом к основанию 7, другим – к противовесу 10. Направляющие струны пропущены через блоки 22. Между основанием плавающей крыши 6 и нижней рамой 15 ограждения при любом положении (отметке) плавающей крыши 6 обеспечивается проход высотой $h$.

На высоте $h$ от верха плавающей крыши на направляющих струнах 21 установлены упорные зажимы 23, которые при перемещении плавающей крыши вверх складывают ограждение на "Гармошку", чем сохраняют проход высотой.

Переходная площадка 20 имеет раму 24, прикрепленную на кольце 12 жесткости резервуара 13. Для подъема людей с площадки кольца 12 жесткости на переходную площадку 20 имеется стремянка 25. Переходная площадка 20 снабжена ограждением 26, люком 27. На фиг. 1 и 2 позицией 28 показан уплотняющий затвор плавающей крыши 6.

Предлагаемое устройство работает следующим образом.

Резервуар 13 имеет шахтную лестницу. С площадки кольца 12 жесткости по стремянке 25 люди поднимаются на переходную площадку 20. Через люк 27 по ступеням 2 лестницы спускаются на плавающую крышу 6. При этом ограждение обеспечивает безопасность.

## Формула изобретения

1. Устройство для обслуживания объектов наплаву внутри резервуаров, содержащее лестницу, ступени которой связаны тетивами и закреплены фиксирующими средствами, переходную площадку и ограждение, отличающееся тем, что, с целью расширения эксплуатационных возможностей, оно снабжено барабанами и противовесом, причем барабаны закреплены на переходной площадке, противовес соединен с тетивами, а ограждение снабжено направляющими и выполнено в виде жестких четырехугольных рам с кольцами, поперечины которых соединены гибкими связями, при этом рамы смонтированы с помощью блоков на направляющих, пропущенных через кольца, а тетивы пропущены через барабаны, причем противовес также соединен с нижними концами направляющих, верхние концы которых закреплены на переходной площадке.

2. Устройство по п. 1, отличающееся тем, что фиксирующее средство выполнено в виде зажима, содержащего сухарь и болт.

3. Устройство по п. 1, отличающееся тем, что, с целью обеспечения складывания жестких рам и гибких подвесок, оно снабжено ориентирующими выпукло-вогнутыми втулками-стопорами, контактирующими выпуклыми поверхностями с рамами.

Источники информации,
принятые во внимание при экспертизе

1. Транспорт и хранение нефтепродуктов за рубежом. Тематический обзор ЦНИИЭнефтехим. М., 1977, с. 10.

2. Авторское свидетельство СССР № 663814, кл. E06C 1/38, 1977.

# Изобретатель Садыков Габит Гатович является автором следующих патентов:

## Уплотняющий затвор плавающих крыш резервуаров

Изобретение относится к резервуаростроению. Предлагаемая конструкция уплотняющего затвора плавающих крыш резервуаров содержит стенку резервуара, периферийную часть плавающей крыши резервуара, верхнее и нижнее вторичные уплотнения, защитный металлический лист, резинотканевую шторку, шарнирно-стержневую систему, пружины сжатия, скользящий лист, фартук, шарнирную систему для соединения скользящего листа со скребком, скребок, кольцевые нагреватели. Изобретение позволяет повысить газоплотность затвора, уменьшить до минимального загрязнение внутренней полости затвора, уменьшить пожароопасность, более эффективно произвести очистку стенки резервуара от остатков нефти, отложений парафина, загрязнителей, сократить сроки монтажа и повысить ремонтопригодность. 1 з.п. ф-лы, 1 ил.

## Уплотняющий затвор плавающих крыш резервуаров

Изобретение относится к резервуаростроению. Уплотняющий затвор включает резинотканевую шторку, скребковое устройство, пружины сжатия, один конец которых неподвижно прикреплен к плавающей крыше, скользящие листы, на верхних профильных концах которых между Г-образными профильными деталями зажато верхнее уплотнение, а нижних концах, между П-образными профильными деталями, зажаты нижние скребки-уплотнители и закреплены с помощью рычагов, имеющих винты-регуляторы, жесткие скребки, прижимаемые к стенке резервуара пружинами. Скользящие листы соединены с плавающей крышей подвеской, обеспечиващей необходимый зазор между ними. Скользящие листы с помощью шпилечного соединения соединены с защитными металлическими листами, снабженными резинотканевой шторкой. На плавающей крыше установлены кольцевые нагреватели. Технический результат - повышение газоплотности затвора, уменьшение до минимального загрязнения внутренней полости затвора, уменьшение пожароопасности, повышение качества очистки стенки резервуара от

остатков нефти, отложений парафина, загрязнителей, сокращение сроков монтажа и повышение ремонтопригодности. 1 з.п. ф-лы, 1 ил.

### Уплотняющий затвор плавающих крыш резервуаров

Изобретение относится к резервуаростроению. Конструкция уплотняющего затвора плавающих крыш резервуаров включает резинотканевую шторку, скребковое устройство, пружины сжатия, один конец которых неподвижно прикреплен к плавающей крыше, скользящие листы, на верхних профильных концах которых между Г-образными профильными деталями зажато верхнее уплотнение, а на нижних концах между П-образными профильными деталями зажаты нижние скребки-уплотнители и закреплены с помощью рычагов, имеющих винты-регуляторы, жесткие скребки, прижимаемые к стенке резервуара пружинами. Скользящие листы соединены с плавающей крышей пантографными подвесками и с помощью шпилечного соединения соединены с защитными металлическими листами, снабженными резинотканевой шторкой. На плавающей крыше установлены кольцевые нагреватели. Задача, решаемая изобретением, заключается в повышении газоплотности затвора, уменьшении до минимального загрязнения внутренней полости затвора, уменьшении пожароопасности, повышении качества очистки стенки резервуара от остатков нефти, отложений парафина, загрязнителей при отрицательной температуре, обеспечении работоспособности затвора при любой высоте плавающей крыши, сокращении сроков монтажа и повышении ремонтопригодности. 2 з.п. ф-лы, 1 ил.

## АҠЫЛ ЫНЙЫЛАРЫ ҠАЛДЫРҘЫ

*/ Риф МИФТАХОВ. Аҡыл ынйылары ҡалдырҙы*
*//Йәшлек.- 2013.- 22 ноябрь/*

Алдымда "Фәһем шишмәһе" исемле китап ята. Уны миңә авторы Ғәбит ағай Садиҡов: "Риф ҡустым, ошо китапты эшеңдә ҡулланһаң, шәп булыр ине", – тигән теләк менән тиҫтә йылдар элек (*йыйынтыҡ 1994 йылда сыҡҡан*) бүләк иткәйне. Ысынлап та, мин уны эшемдә – "Һәнәк" журналының яңы һанын туплағанда йыш ҡулландым. Хәйер, быға тиклем дә фәһем шишмәләрен – замана әйтемдәрен, мәҡәлдәрен, тапҡыр һүҙҙәрҙе, төрлө һынамыштарҙы туплаған тос, яңы хикмәтле фекерҙәрен яҙып килтерер ине. Тормоштоң һәр хәл-ваҡиғаһынан, кешенең эш-ҡыланыштарынан, холоҡ-ҡылыҡтарынан тупланған һығымталарҙан уйланырға рухи аҙыҡ, ҡулланырға баҙыҡ булған лирик та, сатирик та һүҙ табырға мөмкин ине.

Утыҙ йылдан ашыу "Һәнәк"тә "Әйтелмәгән әйтемдәр" исеме менән баҫыла башлаған мәҡәлдәргә сәбәпсе Ғәбит ағай Садиҡов булды. Дөрөҫөрәге, уның әйберҙәрен баҫыр өсөн уйлап табылды был рубрика. Тик һуңынаныраҡ автор "Һәнәк"тә һәм башҡа баҫмаларҙа сыҡҡан күпләгән мәҡәл-әйтемен бергә туплап, республиканың "Китап" нәшриәтендә телгә алынған йыйынтыҡ айырым китап булып донъя күрҙе. Хәҙер мәҡәлдәрҙең тарихына әҙ генә туҡталайыҡ. Ғәрәп телендә "мәҡәл" термины, "урынлы йәки кәрәк ерҙә әйтелгән һүҙ" тигән мәғәнәне аңлата. Боронғо башҡорт телендә иһә уны "бабайҙар һүҙе", "боронғолар һүҙе" тип тә йөрөткәндәр. Әйтелгәнде көсәйтеү, раҫлау, йә булмаһа, кире ҡағыу өсөн телмәр ағышына индерелгән мәҡәл-әйтемдәрҙе ҡулланыу фекергә ҡеүәт, телмәргә йөкмәтке һәм йәм өҫтәй. Афористик ижадтың ошо гүзәл төрө үҙенең тыуыуы менән сәсәндәргә – халыҡтың мәшһүр һүҙ оҫталарына бурыслы, әлбиттә. Уларҙың тыуыуы ла туҡтауһыҙ барған өҙлөкһөҙ процесс, төрлө замандың төрлө быуын кешеләренең поэтик ижад емеше. Юҡҡа халыҡ, уларҙың әһәмиәтен билдәләп: "Йөҙ күрке – һаҡал, һүҙ күрке – мәҡәл", – тимәгән. Сөнки был фәһемле һүҙҙәр тормошто, донъяны, айырым кешеләрҙе күҙәтеүҙән, оло тәжрибәгә таяныуҙан тыуғандар. Шуға ла халыҡтың ауыҙ-тел ижады, төрлө быуын сәсәндәренең, шағирҙарҙың, яҙыусыларҙың яҙма әҙәбиәте уларҙың төп сығанағын тәшкил иткән. Ә бына мәҡәл, әйтем кеүек тапҡыр һәм мәргән һүҙҙәр ижад итергә бөтә һәләтен, маһирлығын, аҡыл-тәжрибәһен арнағандарҙы быуындар, хатта быуаттар һуҙымынан да табыуы ҡыйын. Һуңғы осорҙа иһә ана шундай сәсән-әҙип булып – алдыбыҙға китабын һалып һүҙебеҙҙе башлаған мәҡәл-афоризмдар оҫтаһы булып Ғәбит ағай Садиҡов йәшәне, ижад итте.

Бай аҡыл йыйған сәсән телле шәхес булыу өсөн башта тормоштоң төрлө юлдарын, яҙмыштың билдәһеҙ бейеклектәрен үтергә, кешеләрҙең көллөһөн күрергә, аңларға, сағыштырырға – донъяның әсе-сөсөһөн татырға тура килә уға. Быны аңлау өсөн Ғәбит

ағайҙың ҡыҙыҡлы һәм фәһемле биографияһына ҡыҫҡаса ғына күҙ һалайыҡ. Ул 1923 йылдың 25 октябрендә Шишмә районының боронғо башҡорт ауылы – Урта Хәжәттә тыуа. Тыуған ауылында башланғыс, күрше Ябалаҡлыла тулы булмаған урта белем ала. 1937 йылда Өфөләге төҙөлөш техникумына уҡырға инә. 1942 йылда үҙе теләп фронтҡа китә. Өфөлә ойошторолған 214-се уҡсылар дивизияһы составында Степной, Сталинград, икенсе Украина фронттарында Украинаны, Молдавияны, Румынияны, Венгрияны азат итеүҙәге ҡанлы бәрелештәрҙә ҡатнаша. Бер нисә тапҡыр яралана, контузия ала. Ҡыҙыл Йондоҙ, Ватан һуғышы ордендары, "Сталинградты обороналау", ике "Батырлыҡ өсөн", "Германияны азат итеү өсөн" һәм 12 тапҡыр төрлө юбилей миҙалдары менән бүләкләнә. 1944 йылдың аҙағында танк-техник училищеһына ебәрелгәс, йәштән яратҡан һөнәре – спорт менән ныҡлап шөғөлләнә башлап, ике йылда йөҙөү буйынса спорт мастеры исемен, еңел атлетика буйынса 1-се разряд яулай. Курсанттар ротаһы старшинаһы булараҡ, хәрби-сәйәси әҙерлек программаларын үҙләштереү буйынса ойошторолған түңәрәктәр менән етәкселек итә. Һуғыштан һуң Салауат ҡалаһындағы "Башкирэнерго" берекмәһенә ҡараған йылылыҡ селтәре, 1970 йылда ойошторолған ҙур коллективлы "Салауатнефтехимстрой" тресының производство-техник начальнигы вазифаларын башҡара. Туғыҙ йылдан Өфөләге "Башнефтехимстрой" тресына технолог итеп билдәләнә. Бында нефть институты ғалимдары менән берлектә күп кенә техник яңылыҡ индерә һәм патент танытмалары ала. Ғәбит ағай, производствола уңышлы һәм ижади эшләүе менән бер рәттән, ситтән тороп Урал политехник, Мәскәү үҙәк патент институтын уңышлы тамамлай.

Бына уның үткән хәтәр йылдарға, уҙған утлы юлдарға, уларҙан һуң эш хеҙмәте, һөнәре менән бәйләнешле ҡалаларға, төрлө ойошма-идараларға ҡағылышлы ҡоро ғына күрһәтелгән ҡыҫҡаса биографияһы. Хәйер, аңлаған кешегә ошо һаран йылдар-юлдар һаналышында ла Ғәбит ағайҙың яу һәм хеҙмәт ҡаһарманлығын, һәр өлкәлә, һәр нәмәлә маһир, иң мөһиме, ижадсы булыуын күреү-аңлау ҡыйын түгел. Юҡҡа ғына ул бер мәҡәләндә: "Ижад толпарына атланғанда йүгәнде үҙең кей", – тип әйтмәй. Эйе, йүгәнде ул йәштән генә үҙе кейә, йөгән үҙе тарта. Һуғышта ла, тыныс тормошта ла, ижадта ла. Хеҙмәт яратыу, егәрле булыу, сыҙамлылыҡ менән ныҡышмалылыҡ кеүек бала сағынан үк килгән сифаттары мыҡты кәүҙәле, һабантуйҙар батыры, 34 йәшендә генә вафат булып ҡалған атаһы Мөхәмәтғата бабайҙан, бигерәк тә әсәһе Хәбибъямал инәйҙән йоҡҡандыр, моғайын. Ябалаҡлынан 16 йәшендә генә Урта Хәжәткә килен булып төшкән һылыу ҡатын таҡмаҡ-йырға, фәһемле әйтем-мәҡәлдәргә, кинәйәле һүҙгә оҫҡор була. Үҙ теленән дә улар кәрәк мәлендә ағылып тора. Уҡығанда математиканан бөтә мәсьәләләрҙе иң тәүҙә сисеп өлгөрөүсе һәләтле егеттә әсәһе һәләте лә иртә асыла. Һуғышҡа тиклем Өфөлә уҡығанда "Йәш төҙөүсе" гәзите биттәрендә балалар өсөн яҙылған хикәйәләре, шиғырҙары күренгеләй башлай. Ишеткән-уҡыған тапҡыр, фәһемле һүҙҙәр менән бергә, үҙ күңеленә килгән төрлө

һынамыштарҙы, мәҡәл-әйтемдәргә яҡын фекерҙәрҙе ҡуйын дәфтәрҙәренә теркәп ҡуйыу күңел ихтыяжына, ғәҙәтенә әүерелә бара. Бигерәк тә абруйлы журналист Ф. Комиссаров, Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримовтың хуплауҙарын ишеткәндән, ярҙамдарын күргәндән һуң...Ғәбит ағайҙың маһир һөнәр оҫтаһы, күп яҡлы тынғыһыҙ ижадсы булыуын раҫлаусы тағы ла хәҡиҡәткә әүерелгән ваҡиғаға туҡталып үтке килә.

1975 йылда Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың патент-техник әҙәбиәте бүлегенең уҡыу залында Ғәбит ағайҙың ул саҡтағы Башҡорт дәүләт медицина институтының офтальмология кафедраһы доценты, һуңынан Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты директоры, академик Марат Аҙнабаев менән көтөлмәгән осрашыуы була. Ошо ябай осрашыу уйлап табыу өлкәһендәге оло ижади хеҙмәттәшлеккә әүерелә. Күптәргә билдәле булыуынса, беҙҙең республикала балаларҙың күҙен дауалау, һуҡыр тыуған сабыйҙарға операция яһау өлкәһендә илдә, хатта донъяла беренсе башлап ҡыйыу аҙымдар яһала. Был иҫ киткес нескә микрохирургияны тормошҡа атҡарыу өсөн әллә күпме яңы операция ҡорамалы, яңы техник ҡулайлама һәм ысул уйлап табырға тура килә. Бына ошонда фән һәм техниканың, ике кеше маһирлығының, йөҙәрләгән оҫтаның эше күренә лә инде – улар һоҡланғыс һөҙөмтәләргә өлгәшә. Сөнки был медицина өлкәһендә яңы асыш булһа, Ғәбит ағайҙың ижади илһамы, дәрте менән ғәмәлгә аткарылған ҡорамалдары нескәнән-нескә операцияларҙы ике-өс тапҡыр тиҙерәк эшләргә ярҙам итә, күҙ туҡымаларын төрлө йәрәхәттәрҙән ҡотҡара. Уларҙы башта Ҡазандағы заводта күпләп сығаралар, тора-бара бөтә Рәсәйҙә файҙаланалар.

"СССР уйлап табыусыһы" билдәһен йөрөткән Ғәбит ағайға 1997 йылда "Башҡортостандың атҡаҙанған уйлап табыусыһы" тигән исем бирелеүе лә – үтә нигеҙле һәм хаҡлы яуланған дәрәжә. Был өлкәлә үткән йылдарҙа ла, күп тәкдиме һәм уйлап табыуҙа өлгәшкән яңылығы өсөн әллә нисә тиҫтә патент авторы булған һөнәр оҫтаһы ине ул Ғәбит ағай Садиҡов, Башҡортостан Яҙыусылар союзына ағза итеп алыныуы ла ғәҙел һәм ваҡытлы ине.

Уның хаҡындағы һүҙемде әҙиптең "Фәһем шишмәләре" исемле китабынан башлағайным. Ике тиҫтә йыл "Һәнәк" журналында эшләү дәүерендә миңә Ғәбит ағайҙың, әйтелмәгән әйтемдәренән тыш, шиғырҙарын да, хикәйә-юморескаларын да, мәҙәктәрен дә – төрлө жанрҙағы әйберҙәрен дә тәүләп уҡырға, редакторларға тура килде. Мәҡәл-әйтемдәре кеүек ҡыҫҡа, тос фекерле, сатира һәм юмор, кинәйәле һүҙ менән һуғарылған әҫәрҙәренән һәр кем аҡылына ем, күңеленә кинәнес, йылмайыр-уйланыр һүҙ табыр ине. Үҙе менән аралашҡанда һәр кем ысын ир-егеттәрҙә, аҡыллы ағайҙарҙа ғына була торған алтын сифаттарын күреп-тойоп һоҡланып, үрнәк алыр, тәжрибә туплар ине. Үҙ-ара уртаҡлашыр, серләшер өсөн быларҙан да ҙурыраҡ байлыҡ буламы ни?!

## Ғәбит САДИҠОВ. АФОРИЗМДАР

**#АғиҙелЖурналы**

- Атҡа - даға, юлсыға - доға.
- Атлы кеше - аттың хужаһы, машиналы кеше - машинаның ҡоло.
- Ат сапҡанға эт сапҡан.
- Ат: "Трамвайҙы ла дуғалап егәләр икән".
- Ат кәмеүе "ат көслө"ләрҙең үрсеүенән килә.
- Ат һарайын да, батша һарайын да ваҡытында таҙартып тороу кәрәк.
- Бәйге атын бәйҙә тотмайҙар.
- Аҡыллы ат "өс ҡамытым бар", тип маҡтанмаҫ.
- Ишәктән ишеткәнде атҡа еткермә.
- Ҡамыт кейеү йөк тартыу түгел әле.
- Арбаны аттан артта йөрөгәне өсөн әрләмәйҙәр.
- Сығынсы атҡа сыбыртҡы йыш эләгә.



## ҒӘБИТ САДИҠОВ. ӘЙТЕМДӘР

*/Ағиҙел.* Сәсмә әҫәрҙәр,
*19 ноябрь 2022/*




- Ҡабалан эшләнгән эш ҡабаттан эшләнелә.
- Телдең оҙонлоғо аҡыл ҡыҫҡалығынан.
- Өй түбәһе тишек булһа, ямғыр йышыраҡ яуа.
- Энә үҙ өсөн текмәй.
- Аҡ кәбеҫтәгә ҡара кәзә лә ҡаршы түгел.
- Ғәйбәттең һәйбәте булмай.
- Шахматта иң ҡурҡыныс фигура - ферзгә әүерелгән пешка.
- Ҡояш ҡына бул, тирә-яғыңда әйләнеүселәр табылыр.
- Бәғзе берәүҙәрҙе йүнәтеү өсөн йүкә сөй ҙә етә.
- Оҫта алдаҡсы дөрөҫлөккә таяна.
- Дуҫлыҡ менән дошманлыҡ араһы бер артыҡ һүҙ.
- Керемең артһа, сығымың да артыр.
- Ныҡ күтәрелгән танау күҙҙе ҡаплай.
- Аҡыллы хужа этенә ҡушылып өрмәҫ.
- Төймә кәрәклеге ул өҙөлгәс кенә беленә.
- Төпкә егелгән ат сыбыртҡыға яҡыныраҡ.
- Тунһыҙға ҡыш йыш килгән кеүек.
- Тел менән эшләгәндең ҡулы ял итә.
- Талантты талап алып булмай.
- Алға һикереү өсөн, бер аҙ артҡа сигенһәң дә була.
- Аҡыл тәрәнлеге һаҡал оҙонлоғо менән үлсәнмәй.
- Ҡараңғыла күләгә булмай.
- Һөйөү тойғоһонан мәхрүм генә күптәрҙе һөйә ала.
- Йырлап йәшәү өсөн йырсы булыу мотлаҡ түгел.
- Иң алама ел - башта иҫкән ел.
- Тормош ҡурайһыҙ бейетә.